МУНИЦИПАЛЬНОЕ АВТОНОМНОЕ ДОШКОЛЬНОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ЦЕНТР РАЗВИТИЯ РЕБЕНКА - ДЕТСКИЙ САД «АЙЫУКАЙ» Г. БАЙМАК
МУНИЦИПАЛЬНОГО РАЙОНА БАЙМАКСКИЙ РАЙОН
РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

# Выступление по контенту «Изучение родного (башкирского) языка» электронного детского сада

октябрь, 2019г., Уфа

Азнабаева Ф.Г.

Хөрмәтле педагогтар!

Бөгөн һүҙебеҙ башҡорт балалар баҡсаһында телмәр үҫтереү эшмәкәрлеге тураһында булыр.

Мәктәпкәсә белем биреү системаһы һуңғы йылдарҙа күп кенә үҙгәрештәр , яңылыҡтар кисерҙе. Мәктәпкәсә йәштәге баланың телмәр үҫеше ФДБС нигеҙләнеп балалар ойошмаһының дөйөм белем һәм тәрбиәләү эшенең айырылғыһыҙ бер өлкәһе булып тора.

Мәктәпкәсә йәштәге баланың телмәр үҫеше Федераль белем биреү стандартына нигеҙләнеп, төп Федераль белем биреү программаһына һәм региональ программаға таянып алып барыла.

Беҙҙең Республикала мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн «Башҡортостан-тыуған илем» программаһы тәрбиә һәм белем биреү тыуған телдә алып барылған балалар ойошмаларында үҙ аллы программа булып ҡулланыла.

Программала тәҡдим ителгән материал мәктәпкәсә йәштәге баланың *социаль-коммуникатив, танып белеү, художестволы-эстетик, телмәр һәм физик үҫешен* арттырыуға йүнәлтелгән һәм милли мәҙәниәт, тыуған телде, төбәкте, илде өйрәнеүе аша байытылыуын күҙ уңында тота. Үҙ халҡының рухи байлығын милли мәҙәниәтен өйрәнеү, төбәктә йәшәгән башҡа милләттең мәҙәниәте менән байытыу балала кешелек ҡиммәттәренең әҙмә-эҙлелеген аңлауға булышлыҡ итеп, юғары дәрәжәле милли үҙ-аңлы һәм рухи мәҙәниәтле шәхес булып формалышыуына һәм үҫешенә нигеҙ һала.

Телмәр үҫтереү шәхес тәрбиәләүҙә төп шарттарҙан һанала. Ул ете йәшкәсә тиҙ үҫешә һәм ошо осорҙа баланың психик һәм физик үҫешенә йоғонтоһо ҙур була. Баланың йәш үҙенсәлектәренән сығып тел өйрәнеүгә ыңғай ҡараш булдырыу, башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә , тарихына, йолаларына ҡыҙыҡһыныу уятыу, туған телдә дөрөҫ һөйләшергә өйрәтеү, үҙенде уратып алған ысынбарлыҡ менән таныштырыу өҫтөндә системалы эшләү –телмәр үҫтереүҙең төп бурыстары. Уны тормошҡа ашырыуҙа традицион ысулдар менән бергә яңы технологиялар ҡулланыу отошло һәм һөҙөмтәле.

Балаларҙың телмәрен үҫтереү-балалар баҡсаһының дөйөм белем-тәрбиәләү эшенең айырылғыһыҙ бер өлөшө, сөнки бала менән көн режименда аралашыу тик тыуған телдә алып барыла.Шулай ҙа дөрөҫ телмәр үҫтереү, баланың тыуған теленә ҡыҙыҡһыныу уятыу ата-әсәнең һәм педагогтарҙың төп бурысы һәм маҡсатлы эше булараҡ түбәндәге дөйөм маҡсаттарҙа сағыла.

**Телмәр үҫтереү өлкәһенең дөйөм маҡсаты**

Туған тел өндәрен ишетеү, асыҡ, аныҡ тәбиғи интонация менән әйтеү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һуҙынҡыларын һәм тартынҡыларын дөрөҫ ишетергә һәм әйтергә өйрәтеү.

Тәҡдим ителгән тема буйынса эҙмә - эҙлекле, тулы һөйләмдәр менән һөйләү һәләтен булдырыу.

Фонематик ишетеү һәләтен камиллаштырыу: билдәле өнгә һүҙ таба белергә, ошо өн булған һүҙҙе һөйләмдән айырып ала һәм һүҙҙә урынын (һүҙҙең башында, уртаһында, аҙағында) билдәләү.

Дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙә әйтеүгә һәм уларҙың мәғәнәһенә төшөнөүгә өйрәтеү.

- Тирә-йүндәге әйберҙәр, ваҡиғалар һәм күренештәр тураһында төшөнсәләр биреү, шул нигеҙҙә балаларҙың һүҙ байлығын арттырыу һәм активлаштырыу.

Балаларҙы үҙҙәре күҙәткән, күргән ваҡиғалар хаҡында һәм шулай уҡ сюжетлы һүрәттәр буйынса ябай ғына хикәйә төҙөүҙе булдырыу. Диалогик телмәр үҫтереүҙе камиллаштырыу, һорауҙар биреү, үҙҙәренән һорауҙарға яуап ҡайтара белеүгә ирешеү.

Нәфис әҙәбиәт һәм ауыҙ – тел жанрҙары менән таныштырыу, уларҙы айыра белеү (әкиәттәр, легенда, ҡобайыр, эпос, таҡмаза, көләмәс, һынамыштар һ.б.), туған тел байлығына иғтибар итеү. (әҫәрҙе эстетик тойғо менән ҡабул итеү, уның йөкмәткеһенә, ваҡиғаға, персонаждар ҡылығына үҙҙәренең шәхси мөнәсәбәтен әйтә белеүҙе үҫтереү.

Кешеләр менән һаулыҡ һорашыу, хушлашыу, үҙенең һорауын, теләген белдереү, рәхмәт әйтә белеү, аралашҡанда кешенең исем – шәрифтәрен атап әйтеүгә өйрәтеү.

Телмәр үҫтереүгә ярҙам итеүсе мөхиткә ингән һәр төркөмдәге китапхана үҙәге, күргәҙмәлек материал, өҫтәлмә мәғлүмәт алырлыҡ төрлө ҡыҙыҡлы әйберҙәр; тикшереү – эксперимент үткәреү , театр, музыка, эстетик-зауыҡ, конструкторлау һәм тәбиғәтте өйрәнеү үҙәге – былар барыһы ла  эсә телендә аралашыу өсөн шарттар булдыра. Ул баланың рухи һәм физик үҫешенә йөкмәткеле яңы күренеш индерә. Байытылған үҫтереүсе мөхит баланың төрлө эшмәкәрлегендә социаль һәм тәбиғи араларҙың берлеген тәьмин итә, баланың танып белеү әүҙемлеген, дөйөм күҙаллауын, телмәрен, тыумыштан булған һәләттәрен үҫтереү өсөн тәүшарттар тыуҙыра.

Китаптағы сағыу һүрәттәр балаға бик оҡшай, уларҙы бик ҡыҙыҡһынып ҡарай. Ошо ваҡытты буш үткәреп ебәрмәү отошло. Бала менән бергә һүрәт ҡарау, тексты булһа яғымлы , эмоциональ итеп уҡыу, ә булмаһа инде бала менән бергә уйлап сығарыу, һорауҙар биреү бигерәк тә урынлы. Был уның фекерләү ҡеүәһен арттырыуға, бәйләнешле телмәрен үҫтереүгә һәм эмоциональ ҡабул итеүгә ярҙам итә. Әҙәби китаптарҙан тыш,белешмә алыу өсөн аҡыл –зиһен һәләтен үҫтереүгә зауыҡлы тематик   китаптар һәм  энциклопедиялар булыуы зарур. Китаптар ярҙамында нисек ҡатмарлы һәм ауыр һорауҙарға яуап табырға була икәнлеген аңлатыу - күрһәтеү  үҙ аллы мәғлүмәт туплауға ынтылыш бирә һәм телмәр үҫешенә булышлыҡ итә.

Дөйөм маҡсаттан һәр йәш   төркөмө үҙенсәлектәренә ярашлы маҡсаттар билдәләнелә һәм баланың төп эшмәкәрлеге уйын аша асыла.

Уйын – балалар өсөн доньяны танып белеү сараһы, һәр яҡлап гармониялы үҫеш сығанағы. Ғалимдар иҫбатлауынса, баланың телмәр үҫеше ҡул суктарының

һәм бармаҡтарҙың нескә хәрәкәттәр башҡара алыуы менән тура бәйләнештә булыуы һәм уны “тыштағы мейе” тип атауҙары билдәле. Бәләкәй йәштәге балаларҙан башлап, өлкәндәр төркөмөнә тиклем бармаҡ уйындарын ҡулланыу отошло . Кескәйҙәр төркөмөндә бармаҡтарҙы бөкләү, туҡылдатып хәрәкәт иттереү: атлай, йүгерә, бейей хәрәкәттәрен һүҙҙәр менән әйтеү, ҡабатлау, һүрәттәр, шиғырҙар менән нығытыу әһәмиәтле. ????? Туп-ҙур-бәләкәй

Ағастар –һүрәт

65-се бит ҡуңыҙ- шиғыр, һүрәт

Ҡыңғырау

Күбәләк, ҡуян -һүрәт

Ысынлап та, бала уйнаған саҡта өҙләкһеҙ хәрәкәттә була һәм өлкәндәрҙең төрлө уйындар уйнатып тороуы баланың телмәр үҫешенә ҙур йоғонто яһай. Мәҫәлән: һүҙле - хәрәкәтле уйындар “Күңелле балалар” , Наза Аҡ тирәк-күк тирәк Миңлебай Итексе кеүек йырлы- бейеүле уйындарҙа балалар һүҙҙәрен тиҙ генә отоп алалар, хәрәкәтен һүҙҙәренә тура килтереп башҡаралар.

Уйындарҙа баланың бөтә хәрәкәттәре лә ирекле башҡарыла, үҙ теләге менән үтәлә. Күп хәрәкәтләнгәндә генә уның интеллектын үҫтереүгә нигеҙ һалына, тирә-йүн тураһындағы белеме киңәйә, арауыҡтағы предметтарҙы күреп танырға өйрәнә һәм характерында ыңғай һыҙҙаттар формалаша.

**Телмәрҙә өндәр мәҙәниәте тәрбиәләү.**

Башҡорт теле-башҡорт халҡының милли теле. Ул бик боронғо һәм бик үҙенсәлекле телдәрҙең береһе. Ул донъялағы өндәр байлығын башҡа телдәргә ҡарағанда тулыраҡ сағылдырған, йәғни башҡорт теле башҡа телдәрҙән үҙенсәлекле ә, ө, ү, ң, ҙ,ҡ, ҫ, ғ, һ, өндәре булыуы менән айырылып тора.

А, ә, э (е), и, о,ө,у,ү, ы башҡорт теленең һуҙынҡылары һәм үҙенсәлекле һуҙынҡы өндәре: ә,ө,ү.

Һуҙынҡы өндәр ҡалын һәм нәҙек була:

*-а, ы, о,у*-ҡалын һуҙынҡылар: *бала,был, тор, урам, ойоҡ*

*-ә, э (е), и, ө, ү*-нәҙек һуҙынҡылар: *әсәй, белем, төрлө, иркен, элек*

Башҡорт һүҙҙәре йә нәҙек һуҙынҡылы, йә ҡалын була. Ҡалын һуҙынҡылы һүҙҙәргә ҡалын ялғау, нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәргә нәҙек ялғау ҡушыла: *бала-лар, ҡурсаҡ-тар, әсәй-ҙәр, бесәй-ҙәр.* Был һүҙҙәрҙе күргәҙмәлек материалдарға таянып, һүрәттәр йәки уйынсыҡтар ярҙамында әйтеү, ҡабатлау мотлаҡ.

Башҡорт телендә тартынҡылар *яңғырау* һәм *һаңғырау* тартынҡыларға бүленә.

Һаңғырау тартынҡылар тик шауҙан ғына тора:*п,ф, к, ҡ, т, с, ҫ, ш,х, һ,ч, ц, щ.*

Яңғырау тартынҡыларҙың яһалышында шау ҙа, тауыш та ҡатнаша: *б, в, г,ғ, д, ҙ, ж,з, й, л, м, н, ң, р.*

*Р, л, м, н, ң, й, в (уы)*-талғын (сонор) өндәр. Улар ҙа яңғырау тартынҡыларға инә.

Башҡорт теленә генә хас булған һуҙынҡыларҙы һәм а, у, о өндәренең пары булған ә. ү,ө өндәрен ишетергә, әйтергә , уларҙың нәҙек һуҙынҡылар икәнлеген практик рәүештә аңлатыу алып барыла. (тылсымлы өндәр 6-сы бит: кәзә, һарыҡ)